*Әнүәр ҒИБӘҘӘТОВ*

# ХЕҘМӘТТӘ — ТЫУҒАН ЕР ЙӘМЕ



Элек-электән халҡыбыҙ тереклек итеү өсөн тырышҡан: эшләгән, көрәшкән, хыял иткән. Кешенең яҡшы тормошҡа ынтылышы бигерәк тә һуңғы йылдарҙа реформалар үткәреүҙә экспериментҡа әүерелгән ауыл ерендә асыҡ сағылды.

Сәнәғәттә һәм ауыл хужалығында ҙур потенциаль мөмкинлектәре булған Башҡортостан Рәсәйҙең иҡтисади доноры булып килде һәм килә. Ауыл халҡының йәшәү кимәле түбән. Әлегәсә булдырылған структураларҙы тамырынан емермәй, коллектив хужалыҡтарҙы һаҡлап алып ҡалыу, ауыл тормошона яңы баҙар мөнәсәбәттәре индереү һөҙөмтәһендә Башҡортостандың ауыл хужалығында үҫеш тенденциялары һиҙелә башланы. Эшлекле, егәрле кеше, ауылда яҡшы йәшәргә мөмкин, тип иҫәпләй. Республикала ауыл халҡының йәшәү кимәле хәҙер Рәсәй региондары араһында тәүге тиҫтә иҫәбендә.

Яңы реформалар шауҡымы «Байрамғол» созхозына ла теймәй ҡалманы. Ҙур совхоз бер нисәгә бүленде.

Әле ауыл хужалығы производство кооперативы иҡтисади хәлен әкренләп нығытыу өҫтөндә. Хужалыҡтың 1999 йылды 2 миллион һумдан ашыу килем менән сығыуы быға дәлил булып тора. Тырыш етәкселәрҙең, эшһөйәр ауыл кешеләренең фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһе был.

Кооператив йыл һайын уртаса 5 мең гектарҙан ашыу ерҙә бөртөклө культуралар сәсә, мал аҙығы культуралары яҡынса 3 мең гектар ер биләй. Коллективтың үҙ аллы етеш йәшәүенә өлгәшеү өсөн сәселгән игендең һәр гектарынан уртаса 22, йәғни барлығы 100-120 мең центнер иген йыйып алырға кәрәк. Шул осраҡта ғына хужалыҡ үҙен етерлек орлоҡ, фураж менән тәьмин итә ала. Эшләгән кешегә натуралата түләү, матди ресурстар алыу өсөн дә иген етәсәк.

Ерҙе яҡшы итеп туңға һөрөү — мөһим шарт. Бының өсөн техника яҡшы эшләргә, ваҡытында яғыулыҡ менән тәьмин ителергә тейеш. Урал артының ҡырыҫ тәбиғәт шарттары яҙғы эштәрҙең ҡыҫҡа агротехник ваҡыт аралығында уҙғарылыуын талап итә. Ваҡытында ямғыры яуып, ҡояш кәрәгенсә йылытып торһа, ауыл кешеһенең күңеле һәр саҡ күтәренке. Сәселгән культураларҙың тигеҙ, дәррәү сығыуын күрһә, ул ихлас шатлана. Сөнки һәр шартлы малға 25 аҙыҡ берәмеге алырына, йәғни кооператив буйынса барлығы 3500-4000 тонна бесән, 1200-1500 тонна сенаж әҙерләйәсәктәренә ышана ул.

«Байрамғол» эшсәндәре, яңы закон талаптарына буйһоноп, 1998 йылдың

башынан яңыса хужалыҡ итеү структураһын ҡабул итте. Кооперативтың һәр ағзаһының ер, мөлкәт пайы билдәләнде. Элекке совхоз ерҙәрендә айырым фермер хужалыҡтары барлыҡҡа килһә лә, йәшәп килгән коллектив хеҙмәт, нигеҙҙә, һаҡланып ҡалды. «Байрамғол»да былдай шарттарҙа өлгәшелгән иң мөһим аҙым — иҡтисади тотороҡлолоҡ. Матди ресурстар таратылманы. Сәсеүлектәр, мал-тыуар һаҡланып ҡалды.

— Сусҡасылыҡ менән шөғөлләнеү бөгөн отошло, — тип аңлатты кооперативтың баш зоотехнигы Марс Камалов. — Тоҡомло сусҡасылыҡ менән шөғөлләнгән, уны үрсеткән өсөн һәм юғары күрһәткестәргә өлгәшһәң, Башҡортостан хөкүмәте дотация түләй. Сығымдар үҙен аҡлай, файҙаһы бар.

Бүлексә ветврачы Мират Кәримов, Венера Сәғитуллина, Анна Рамазанова кеүек үҙ эштәренең барлыҡ серҙәрен яҡшы белгән малсылар инә сусҡаларҙы бер ваҡыттараҡ бәрәнләтергә өйрәнеп алғандар. Быны өсөн фермала махсус тороҡтороу бүлмәһе йыһазландырылған. Һөҙөмтәлә, бер ваҡытта тыуған бәрәстәргә аҙыҡ әҙерләү ҙә, уларҙы ашатыу ҙа еңеләйә, ветеринар-профилактик күҙәтеүҙәр алып барыу, профилактик эшкәртеү уңайлаша, планлаштырылған эштең һөҙөмтәһе лә күренеп тора.

Бүлексәлә эшселәр йәш һыйыр малдарын һимертеү менән дә шөғөлләнә. Йылына ҡарап, 500 башҡа тиклем үгеҙ аҫырайҙар бында. Уларҙың һәр ҡайһыһынан 450-шәр грамдан ашыу тәүлек артым алыуға өлгәшәләр. (Кооперативта 400 грамм артым алыу, йәғни план, яҡшы күрһәткес булып иҫәпләнә). Ҡасип Мәүлитов, Эдик Ваһапов, Фәнил Хәджиев, Рим Бәҙретдинов кеүек малсыларҙың тырышлығы арҡаһында мал һимертеү эше бер кимәлдә тотола.

Быға тиклем байрамғолдар силос өсөн көнбағыш орлоғон ситтән һатып алалар ине. Һуңғы йылдарҙа Октябрьск бүлексәһе механизаторҙары был культураны үҙҙәре үҫтереп алалар. Йыл һайын 40-50 гектар ерҙән 30-35 тонна таҙа орлоҡ алып, бөтә бүлексәләрҙе тулыһынса тәьмин итәләр.

Урал артының ҡырыҫ тәбиғәте шарттарында бойомға ашырылған был яңылыҡтың файҙаһы һиҙелерлек, хатта агротехник енеү ҙә ул, игенселек серҙәренә төшөнөүҙең юғары нөктәһе. Быға ҡәҙәр, Учалыла көнбағыштан орлоҡ алып була, тиһәң, берәү ҙә ышанмаҫ ине.

Крәстиән һабантуйҙарға яҙғы сәсеүҙе тамамлағас йыйыла. Алдағы көнөнә мул уңыш юрай. Сөнки игенселек — ауыл хужалығының нигеҙе, таянысы. Ҡалған эштәр барыһы ла уға бәйләнгән. Шуның өсөн байрамғолдарҙа игенселек эшендә барлыҡ мөмкинлектәрҙе файҙаланалар.

Тәжрибәле, намыҫлы механизаторҙар аталы-уллы Владимир Юрий Батюшевтар, Рәис Аҙнасурин, Владимир Лимонов, Рифат Сәғитуллин һәм башҡа механизаторҙарҙың тырыш хеҙмәте һалынды был уңышҡа. Кооператив ағзалары күпләп мал, ҡош-ҡорт аҫыраны. Иркен йәшәнеләр. Хатта иген һатып машина алыусылар ҙа булды.

Хужалыҡтың Науруҙ бүлексәһендә элек-электән һарыҡсылыҡ менән шөғөлләнеп өйрәнгәндәр. Ике-өс йыл элек кенә бында 2 мең баш һарыҡ аҫырайҙар ине. Хәҙер бер нисә йөҙ баш ҡына тороп ҡалды.

— Һарыҡсылыҡ бөгөн үҙен аҡламай, рентабелле түгел, — тип аңлатты иҡтисадсы Фәрит Ғәфүров. — Республикалағы уртаса кимәлдән юғарыраҡ йөн ҡырҡып килдек, йәғни һәр һарыҡтан 3,5 килограмға тиклем йөн алдыҡ. Ләкин йөндөң хаҡы үтә түбән. Һарыҡсылыҡты килемле итәм тиһәң, һәр береһенән 30-ар килограмм йөн алырға кәрәк.

Науруҙҙар һыйыр малы ла тоталар. Орғасы быҙауҙарҙың бер төркөмө һыйыр көтөүен йәшәртеү өсөн үҙҙәрендә ҡалдырыла, Иҫтамғол бүлексәһе гурттарына ла бирәләр. Үгеҙҙәрҙе Октябрьск бүлексәһенә артабан үҫтерергә оҙаталар. Науруҙҙың алдынғы эшселәре Мәүлит Ибраһимов, Рәүеф Фәтҡуллин, Рәшит Исламов, Фәйрүзә Ҡаһарманова, Рима һәм Альберт Байғариндарҙың ғаиләһе малсылыкта тырыш хеҙмәт өлгөһө күрһәтә.

Эшләргә, йәшәргә тырышып торған етәкселәр эшләй хужалыҡта. Шуларҙың

береһе — Иҫтамғол бүлексәһе управляющийы Вәлит Абдраҙаҡов. Уның инициативаһы менән борон-борондан ата-бабаларыбыҙ файҙаланған ҡарбаҙ төҙөлдө. Баҙҙың махсус рәүештә ҡалдырылған урындарына боҙ тултырһаң, йәйгелеккә ит, май, бүтән аҙыҡ-түлек һаҡлап була. Сөнки ҡарбаҙҙа дүрт градус һалҡын. Ҡоролманың күләме — 12,5 куб. метр. Уның өҫтөндә 6х8 метр ҙурлыҡтағы келәт һалынды. Иң мөһиме — һыуытҡыстар һатып алынмай, электр энергияһы экономиялана.

Иҫтамғолдарҙан күреп, Октябрьск бүлексәһендә лә ҡарбаҙ төҙөнөләр. Ата-олатайҙарыбыҙҙың быуаттар буйына туплаған аҡылы бөгөнгө тормошобоҙҙа тағы кәрәк булыр әле...

Иҫтамғол ауылында пилорама ҡуйылды. Уның бүлексә өсөн дә, халыҡ өсөн дә файҙаһы ҙур.

— Ағастан брус бысып, уны Т-150 тракторына алыштырҙыҡ. Халыҡ хәҙер ағасын Уральскиға пилорамаға ташып яфаланмай, — тине Вәлит Абдраҙаҡов.

Хужалыҡтың Уральск бүлексәһе лә һыйыр малы тота. Йылдың йылы бүлексә малсылары хужалыҡта ғына түгел, район буйынса ла күп һөт һауып алыуға өлгәштеләр. Заман ауыр тип тормай, һуңғы йылдарҙа 200 баш һауын һыйырға иҫәпләнгән мал һарайына капиталь ремонт уҙғарылды. Ҡалғандарында ағымдағы йүнәтеү үтте. 300-ҙән ашыу һыйырҙың, 400-ҙән артыҡ йәш малдың торор ере бар хәҙер. 600 тонна ашлыҡ һыйҙырышлы келәткә лә капиталь ремонт үтте. Унда орлоҡ запасы, фураж һаҡлана.

— Эшләп йөрөгән халыҡҡа рәхмәтлемен, — ти бүлексә управляющийы Риф Ҡаһарманов. — Эш хаҡы түбән тип тормай, тырышалар.

Управляющий менән килешергә генә ҡала. Ысынлап та, эш хаҡы ҙур түгел, уныһы ла һәр ваҡыт эләгеп тормай. Шулай ҙа Гөлгөнә Сәғитова, Альбина Ваһапова, Райхана Хәлилова, Азамат Низаметдинов, Фәсих Кәримов, Нәзирә Абсаттарова, Ғәлиә Ғайсина кеүек малсылар малсылыҡтың киләсәгенә өмөт бағлап эшләйҙәр.

Өмөтһөҙ — шайтан. Ауыл хужалығына ҡараш һис шикһеҙ үҙгәрер. Бүтәнсә булыуы мөмкин түгел. Тештәрен ҡыҫып, йүнләп ҡулаҡса күрмәй күндәм эшләп йөрөгән һауынсылар, көтөүселәр, механизаторҙар бер көн дәүләткә кәрәк буласаҡ.

Хужалыҡтың хәҙер үҙ тирмәне бар. Уральскиҙа урынлашҡан был цехта тәүлегенә 10 тоннаға тиклем иген тартыла. Икмәк бешереү цехында кооператив эшселәре өсөн икмәк бешерелә, ҡасаба халҡына ла һатыла.

Кооперативта инкубатор эшләй. Йыл һайын ул халыҡты тауыҡ, өйрәк себештәре менән тәьмин итеп тора.

Разип Закиров етәкләгән быйма баҫыу цехы халыҡты быймалы итте. Хужалыҡ кәрәк-ярағы өсөн бында кейеҙ ҙә баҫыла. Тегеү цехы ла үҙ функцияһын үтәп тора. Бейәләй, эш кейемдәре тегелә, халыҡтың да заказдары үтәлә.

Һуңғы йылдарҙағы бындай ыңғай үҙгәрештәрҙең башында хужалыҡты биш йыл етәкләгән Мәүлитйән Мәүлитбай улы Һунарғоловтың ҙур ойоштороу һәләте, ныҡышмалығы тора.

Иң мөһиме — «Байрамғол» ауыл хужалығы производство коопертивы коллективы һуңғы осорҙағы буталсыҡ иҡтисадта бөгөлөп төшмәне. Мәүлитйән Һунарғолов районға эшкә күсерелгәс, кооператорҙар идара рәйесе итеп Марс Харис улы Камаловты һайлап ҡуйҙы. Ул байрамғолдар менән эшләп өйрәнгән тәжрибәле белгес. Уның етәкселегендә хужалыҡ яңы юлдар эҙләп, яңы уңыштарға ирешер.